# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

по предмету Родной (башкирский) язык и литературное чтение

**Пояснительная записка**

Рабочая программа составлена на основе следующих нормативно-правовых документов:

1. **Конституции РФ, ст. 43;**
2. **Конвенции о правах ребенка;**
3. **Федерального закона от 29 декабря 2012 г. № 273-ФЗ "Об образовании в Российской Федерации"**;
4. Приказа № 1089 от 5 марта 2004 "Об утверждении федерального компонента государственных образовательных стандартов начального общего, основного общего и среднего (полного) общего образования" (в соответствии с изменениями);
5. Приказа от 9 марта 2004 г. N 1312 Об утверждении федерального базисного учебного плана и примерных учебных планов для образовательных учреждений Российской Федерации, реализующих программы общего образования;
6. Постановления Главного государственного санитарного врача РФ от 29 декабря 2010 № 189 «Об утверждении СанПиН 2.4.2.2821-10 «Санитарно-эпидемиологические требования к условиям и организации обучения в общеобразовательных учреждениях»;
7. Закона "О языках народов Российской Федерации" (с изменениями и дополнениями) от 25 октября 1991 г. № 1807-I
8. Закона Республики Башкортостан «Об образовании в Республике Башкортостан» от 1 июля 2013 г. № 696-з;
9. **Концепции развития национального образования в Республике Башкортостан от 31 декабря 2009 г. № УП-730,Республиканской общеобразовательной программы развития образования на 2013-2017 годы от 30.12.2012 г.№549 с изменениями от 24.10.2013.№473;**
10. **Закона «О языках народов Республики Башкортостан»** (с изменениями и дополнениями) **от 15 февраля 1999 года № 216-з;**
11. Регионального базисного учебного плана и примерных учебных планов для общеобразовательных учреждений Республики Башкортостан, реализующих программы общего образования (Приказ министерства образования РБ № 824 от 06 мая 2014 года);
12. **Нормативной базы по предмету башкирский язык составлена в соответствии с программой по башкирскому языку для учащихся I-XIклассов школ с русским языком обучения. Составители: Усманова М.Г., Габитова З.М.-Уфа.2009.**

13. Учебного плана МАОУ Школа №37 г.Уфа Приказ № _357_ от «__31» ___ мая_____ 20_16_ г.(с изменениями Приказ№853 от 14 12.2015)

14. Положения о рабочей программе МАОУ Школа №37 Приказ № 226__ от «__18.04» 2016 г.

## Аңлатмалы яҙыу

**Туған тел уҡытыуҙың төп маҡсаттары:**

- Башҡортса һөйләшергә, башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеп, үҙ-ара һөйләшергә, тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һөйләргә өйрәтеү;
- Балаларҙың башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радио- телетапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование);
- Аралашыуҙа кәрәк булған типик һөйләмдәрҙе күсереп, үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу;
- Дәреслектәрҙе, башҡортса сыға торған газета- журналдарҙы үҙ аллы һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен булдырыу (чтение);
- Уҡыусыларҙа әсә теленә ихтирам тәрбиәләү, тел өйрәнергә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

- Алфавит. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре, уларҙы дөрөҫ әйтергә һәм яҙырға өйрәнеү;
- Башҡорт телендә ижектәр. Сингармонизм. Йо-йө, йе, йү, йы, йә өн ҡушымсалары;
- Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы айырыу, уларҙы дөрөҫ әйтеү, шулар нигеҙендә һүҙҙәр төҙөү;
- **Кем? Нимә? Кемдәр? Нимәләр?** һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе ҡулланыу; предметты белдергән һүҙҙәрҙең (исемдәрҙең)яңғыҙлыҡ, уртаҡлыҡ, берлек һәм күплек, ваҡыт,эйәлек, урын, йүнәлеш мәғәнәләрен белдереүе,
- **Ни эшләй? Ни эшләне?** һорауҙарын ҡуллана белеү, мәғәнә үҙенсәлектәре;
- **Ниндәй? Ҡайһы? Ҡайҙа?** һорауҙарының мәғәнә үҙенсәлектәрен аңлау, уларға яуап биреү, уларҙың төрлө кимәлдә, шулай уҡ башҡа билдәләр менән сағыштырып күрһәтә алыуы;
- Һүҙҙәрҙе дөрөҫ, ижекләп, аңлы, шыма һәм тасуири уҡыу;
- Әкиәт, шиғыр, хикәйә, көләмәс, йомаҡ (сисеү) тыңлау, йөкмәткеләрен һөйләү. Уҡыған, ишеткән, күргән- белгәндәрен бәйләнешле һөйләү;
- Яҙма һәм баҫма текстарҙы күсереп яҙыу. Яҙылышы ҡатмарлы булмаған һүҙҙәрҙе, 2-3 һүҙҙән торған типик һөйләмдәрҙе тәүҙә күсереп, шунан диктант итеп яҙыу;
- Таныш темаға хикәйә төҙөп һөйләү, уҡытыусы биргән һорауға яуап яҙыу;
- Һөйләм аҙағында нөктә, һорау билдәләрен ҡуя белеү;
- Һүҙҙе юлдан- юлға күсереү өсөн ижектәргә бүлеү;

- Үҙләштерелгән ҡағиҙәләр ярҙамында һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыу, орфографик хаталрҙы табып төҙәтеү;
- Кешеләрҙең исем- шәрифтәрен, фамилияларын, хайуан ҡушаматын, географик атамаларҙы баш хәреф менән яҙыу;
- Интонация яғынан һөйләм төрҙәрен айыра һәм уларҙы телмәрҙә ҡуллана белеү.

**Һөйләү:**

- Уҡыусы диалог төҙөргә;
- Ишеткәндәр, башҡарған эштәр тураһында һөйләү;
- Картиналар, экскурсия, фильмдар, иллюстрациялар буйынса бирелгән ситуацияға ярашлы һөйләү;
- Үҙе, ғаиләһе йә дуҫтары тураһында бәйән итергә;
- Уҡыған тексты аңлы һөйләргә;
- Башҡорт теленән рус теленә тәржемә итә белеү;
- Ҙур булмаған шиғыр, һанашмаҡты яттан һөйләй белергә тейеш.

**Аудиояҙма тыңлау**:

- Аудиотаҫмалағы әкиәт, хикәйәне ишетеп аңлау;
- Таныш һүҙҙәре булған тексты контекстуаль яҡтан аңлау.

**Уҡыу:**

- Ҙур булмаған текста башҡорт өндәрен дөрөҫ  итеп ҡысҡырып уҡыу;
- Был тексты үҙ аллы аңлы уҡыу, темаһын, төп фекерен билдәләү;
- Унан кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡыу, һорауҙарға яуаптар табыу
- Картиналар ҡарау, уға исем биреү;
- Поэтик әҫәрҙе тейешле интонация менән уҡый белеү;
- Текстағы аңлашылмаған һүҙҙәргә иғтибар итмәй генә уҡып ҡарау.

**Яҙыу:**

- Текстан һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе, зур булмаған тексты күсереп яҙыу;
- Хәрефтәрҙе дөрөҫ, матур итеп тоташтырып яҙыу;
- Өлгөгә ҡарап ҡотлау хаттары яҙыу.
- Ишеткән телмәрҙе, йәки тексты һүҙмә-һүҙ йәки ҡыҫҡартып яҙыу;
- Унан тейешле мәғлүмәтте генә һайлап алып яҙма рәүештә теркәү;
- Бирелгән ситуация буйынса текст төҙөп яҙыу;
- Яҙма телмәр саралары;
- Әҫәр жанрҙары: әкиәт, хикәйә, шиғыр, йыр, йомаҡ, тиҙәйткес, әйтеш, һанашмаҡ.

**I кимәл. Балала шәхси сифаттар үҫтерергә:**

Уҡыусы статусын ҡабул итергә, уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнергә. Тыуған илгә, ергә, телгә, яҡын кешеләргә һөйөү тәрбиәләргә. Эшләгән эштәр, ҡылыҡ- фиғел өсөн яуаплылыҡ тойорға. Һау сәләмәт йәшәйеш булдырырға.

**II кимәл. Предмет буйынса белем алырға:**

1) Тел берәмектәрен айыра белергә (һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, өн, хәреф):
2) Һүҙ, һүҙбәйләнеш,предметтың атамаһын, сифатын, эш- хәрәкәтте белдереүсе һүҙҙәрҙе айыра белергә;
3) Уҡырға (минутына 40-45 һүҙ)
4) Хәрефтәрҙе кәрәкле каллиграфик режимда яҙырға, уларҙы бер- береһе менән дөрөҫ тоташтырырға
5) Кластан тыш тәҡдим ителгән 8-10 әҫәрҙе белергә

**III кимәл. Универсаль уҡыу эш төрҙәрен өйрәнергә:**

- Уҡытыусыны тыңларға, уның әйткәнен ишетергә;
- Өндәрҙе әйтергә, тыңларға, сағыштырырға, анализларға;
- Уҡытыусыға һорау бирергә, белешмә алырға;
- Икешәрләп йәки төркөмләп класташтары менән эшләргә;
- Диалог барышында һөйләшеүҙә ҡатнашырға, уның темаһына ярашлы уҡыу мәсьәләһе ҡуйырға, уны сисеү маҡсатында тикшереү эшендә әүҙем ҡатнашырға;
- График- символик  һыҙмаларҙы танырға: һүҙҙең өн (хәреф) моделен, һөйләмдең һыҙмаһын төҙөргә һәм уҡырға;
- Уҡыу һәм яҙыуҙы мәғлүмәт, белем алыу мөмкинселеге итеп ҡулланырға.
- Уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнеү;
- Үҙ аллы белем алыу, мәғлүмәтле булыу;
- Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу;
- Маҡсатты күҙҙалау;
- Эште планлаштырыу;
- Тикшереү эшен ойоштороу;
- Уҡыу объекттарын күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау:
- Эшләнелгән эшкә байҡау яһау, эште баһалау;
- Контроль;

Туған (башҡорт)теленән һәм әҙәби уҡыуҙан тематик планлаштырыу. 3 класс

| № | Тема | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге | План.дата | Факт. дата |
|---|---|---|---|---|
| 1. | Р. Ниғмәти. Беренсе сентябрь | Текстар уҡыу, диалогтар төҙөү, алфатты ҡулланырға өйрәнеү | 7.09 | |
| 2. | Ғ.Рамазанов. Хәйерле сәғәттә | Тасури уҡыу, һорауҙарға яуаптар, һүҙлек менән эш | 14.09 | |
| 3. | А.Игебаев. Еҙ ҡыңғырау. | Автор тураһында һөйләү, хронологик таблица төҙөү | 21.09 | |
| 4. | А.Мөхәмәтшина. Миҙгелдәр | Диалогтар төҙөү, китапсыҡтар сығарыу, һөйләү | 28.09 | |
| 5. | М.Кәримов.Матур көн. | Тасуири уҡыу, Автор тураһында мәғлүмәттәр йыйыу | 5.10. | |
| 6. | Күсереп яҙыу. Йәйге болонда. | Алған белемде ҡулланыу. | 12.10 | |
| 7. | Н.Мусин. Иртә көҙ. | Көҙҙө тасуирлау, телмәрҙе тасуирлау саралары менән байытыу | 19.10. | |
| 8. | Ш.Бикҡол. Башҡортостан икмәге. | Һөйләү, һорауҙарға тулы һәм ҡыҫҡа яуап биреү | 26.10 | |
| 9. | Ш.Янбаев. Көҙ. | Көҙ тураһында текстар төҙөү | 9.11 | |
| 10. | **“Башҡортостанда көҙ” темаһы буйынса инша.** | Башҡортостанда, тыуған төйәктә ҡышҡы тәбиғәт, ундағы төбиғәт матурлығы, балаларҙың, уйындары тураһында әҫәрҙәр менән **танышыу**. | 16.11 | |
| 11. | С.Әлибаев “Оҙайтылған каникул” | Диалогтар төҙөү, текст төҙөү, төркөмдә эш. | 23.11 | |
| 12. | Ғ.Рамаҙанов “Яңы йыл менән” | Открыткалар яҙыу, һүрәттәр төшөрөү | 30.11 | |
| 13. | ”Ә.Вәли “Ҡыш килде” | Тасури уҡыу, диалогтар төҙөү, йыр өйрәнеү | 7.12 | |
| 14. | Д.Бүләков “Һыңар саңғы” | Роллэп уҡыу, һорауҙарға яуаптар, әңгәмә ойоштороу | 14.12 | |
| 15. | С.Муллабаев “Хикмәтле ҡар” | Тасуирлау, Һүҙлек менән эш | 21.12 | |
| 16. | М.Садыҡова “Ҡар тотҡанда” | Диалог төҙөү, ауыл кешеләренең ҡышҡы эштәре тураһында | 28.12 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | әңгәмә ҡороу. | | |
| 17. | Р.Ниғмәти “Ватан” | Тасуири уҡыу | 18.01. | |
| 18. | А.Иҙелбаев “Башҡорт ырыуҙары” | Ырыуҙарҙы белеү, әңгәмә ойоштороу | 25.01 | |
| 19. | К.Кинйәбулатова “Ватаным тауыштары” | Тасуири уҡыу, һорауҙарға яуаптар биреү | 1.02 | |
| 20. | Р.Хәкимов “Башҡорт атлылары” | Һөйләмдәр **төҙөү**, һораузарға **яуаптар биреү**, йөкмәткеләрен **һөйләй белеү**. | 8.02 | |
| 21. | Ф.Рәхимғолова “Шатлыҡлы байрам | Тасуири уҡыу, һорауҙарға яуаптар биреү | 15.02 | |
| 22. | Ә.Моратов “Катюшаны йырлай ҡарттар” | Тасуири уҡыу, һөйләү, һорауҙарға **яуаптар биреү**, | 22.02 | |
| 23 | В.Ғәлимов “Халыҡ артисы А.Мөбәрәков” | диалогтарҙа **ҡатнашыу**, предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәрҙе телмәрҙә **ҡулланыу**. | 1.03 | |
| 24 | С.Шәрипов “Рәссам Әхмәт Лотфуллин | Ккартина буйынса текстар төҙөү | 7.03 | |
| 25 | **“Ҡаһармарманлыҡ юлынан “темаһы буйынса тест.** | Алған белемде яҙма телмәрҙә ҡулланыу | 15.03 | |
| 26 | Н.Иҙелбай “Әсәкәйем» | Ҡотлау открыткалары яҙыу, һорауҙарға яуап биреү | 22.03 | |
| 27 | Ф.Чанышева “Бала өсөн” | Текст ы\ йөкмәткеһе буйынсаәңгәмә ҡороу | 5.04 | |
| 28 | Һ.Дәүләтшина “Бәхет ҡошо” | Һүрәттәр төшөрөү, диалогтар төҙөү | 12.04 | |
| 29 | Һ.Дәүләтшина “Яҙғы күренештәр” | Әҙер фразалар, тасуирлау сараларын менән байытып текст төҙөү | 19.04 | |
| 30 | В.Әхмәҙиев “Яҙ килә” | Яҙғы тәбиғәт тураһында әңгәмә ҡороу | 26.04 | |
| 31 | Ә.Хәмәтдинова “Тамсы менән Тамсыҡай” | Әкиәтте ролләп уҡыу, һорауҙарға яуап биреү | 3.05 | |
| 32 | Р.Ғарипов “Сыйырсыҡ” | Тасуири уҡыу, һүрәттәр төшөрөү | 10.05 | |
| 33 | **Телмәр үҫтереү.**Инша Яҙ етте | Алған белемде яҙма телмәрҙә ҡулланыу | 17.05 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 34 | М.Садыҡова “Тура һүҙ” | Йәйге тәбиғәт тураһында әңгәмә ҡороу, һорауҙарға тулы яуап биреү | 24.05 | |

**ПРИЛОЖЕНИЕ**

**1- 4 –се класс уҡыусыларының башҡорт теле буйынса белемдәрен, белеүҙәрен (умение) һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

**Телдән яуаптарҙы баһалау:**

Уҡыусыларбың телдән һөйләмен, уның фонетик, грамматик яғы менән бер рәттән тасуири уҡыуы ла иҫәпкә алына. Телдән һорау формаһында үткәрелә торған күнегеүҙәр һәр дәрестә алып барыла.

**Тыңлап аңлау күнекмәләрен баһалау:**

1. “тулыһынса аңланы”
2. “өлөшсә аңланы”
3. “аңламаны”

**Уҡыусының монологик һөйләүен баһалау:**

1.- тәҡдим ителгән тема ( рәсем, ситуация) буйынса хикәйә төҙөй белһә;
- дөрөҫ интонация менән, тулы, эҙмә-эҙлекле итеп, текстҡа баһа биреп, мөнәсәбәтен күрһәтеп һөйләй алһа;
- тупаҫ булмаған пауза хаталары ебәрелһә лә, **“5”ле** ҡуйыла.
4 -се класта бәйләнешле һөйләү – 10-12 һөйләмдән тәшкил итә.

2. - айырым паузалар, 1-2 һөйләм хатаһы яһаһа;
- уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ булмаған асыҡлаусы һорау бирелһә,”**4” ле** ҡуйыла

3. - теманың төп йөкмәткеһен асһа;
- 4-6 һөйләм хатаһы ебәрһә;
- уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ асыҡлаусы һорау бирелһә йәки уҡытыусы ярҙамынан башҡа йөкмәткеһен һөйләүҙе башлай (тамамлай) алмаһа, **“3”лө** ҡуйыла.

4. - һөйләгәндә эҙмә-эҙлеклелек һаҡланмаһа;
- паузаларҙа теүәлһеҙлектәр китһә;
- 6- нан артыҡ һөйләм хатаһы һәм грамматик хата яһаһа, “**2”ле** ҡуйыла.

**Диалогик һөйләмде баһалау:**

1. - тейешле темпта дөрөҫ интонация менән һорау ҡуйһа;
- әңгәмәләшенең һорауҙарына тулы яуап ҡайтарһа, “**5”**ле ҡуйыла

2. - дөрөҫ һорау биреп, үҙе лә әңгәмәләшенең һорауына яуап бирһә, ләкин һөйләү ваҡытында уҡытыусы ярҙамына мохтаж булһа;
- 2-3 һөйләм хатаһы ебәрһә, “**4”** ле ҡуйыла.

3. - уҡытыусы ярҙамында ғына һорау бирһә йәки яуап бирһә;
- һорауҙар биргәндә, һүҙҙәр һәм грамматик формалар табыуҙа теүәлһеҙлектәр ебәрһә йәки өйрәнгән теманың бер өлөшөн генә үҙләштерһә;
- 4-5 һөйләм хатаһы ебәрһә, **“3**” лө ҡуйыла.

4. - әңгәмә ваҡытында ҙур ауырлыҡ менән генә һорау бирһә;
- һорауҙарға үҙ көсө менән яуап бирә алмаһа;
- 6- нан артыҡ хата ебәрһә, “**2**” ле ҡуйыла.

## Уҡыу тиҙлеген тикшереү

Башланғыс кластарҙан алып, һәр бала билдәле бер кимәлдә, тиҙлектә шыма итеп уҡый белергә лә бурыслы. Ғөмүмән, етеҙ, дөрөҫ, тасуири уҡыу, уҡырға өйрәтеү әҙәбиәт дәрестәренең төп мөһим талаптарының береһе. Уны, йәғни уҡыу тиҙлеген, 1 бала минутына күпме һүҙ уҡыуына ҡарап билдәләйҙәр. Һәр сирек һайын бер тапҡыр уҡыу тиҙлеге тикшерелә. Баһалар класс журналына ҡуйыла. Түбәндә башланғыс кластарҙан алып, уҡыусы минутына күпме һүҙ уҡырға тейеш булған һандар килтерелә. Уларға ҡарап, уҡыу тиҙлегенә ниндәй талаптар ҡуйылғанын билдәләргә мөмкин.

**Баһалар**

| Баһалар / кластар | «5» | «4» | «3» | «2» |
|---|---|---|---|---|
| I | 30 | 25 | 15 | 15-тән кәмерәк |
| II | 55 | 45 | 30 | 30-ҙан кәмерәк |
| III | 65 | 55 | 40 | 40-тан кәмерәк |
| IV | 80 | 75 | 55 | 55-тән кәмерәк |
| V | 100 | 90 | 80 | 80-дән кәмерәк |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| VI | 110 | 100 | 90 | 90-дан кәмерәк |
| VII | 120 | 110 | 100 | 100-ҙән кәмерәк |
| VIII | 130 | 120 | 110 | 110-дан кәмерәк |
| IX | 140 | 130 | 120 | 120-нән кәмерәк |

## КОНТРОЛЬ ЭШТӘР

3 класс

**1-се сирек.**

Күсереп яҙыу

Йәйге болонда.

Йәйге болон – тамаша,
Нурҙан күҙҙәр ҡамаша:
Сың-сың итеп сыңлаған –
Күк ҡыңғырау сәскәhе;
Уны ихлас тыңлаған –
Бәпембәнең бәпкәhе.
Йәшел скрипка тартҡан –
Моң яратҡан сиңерткә;
Уға ҡарап шаҡ ҡапҡан –
Шаян малай – кесерткән.
Ә аҡ сәскә, аҡ сәскә,
Көлөп бармай тиктәҫкә,
Дәртле көйҙө ишетте,
Бейергә төшөп китте.

(Г. Ғәлиева.)

*(Дәреслек, 17-се бит)*

**2-се сирек.**

Контроль диктант

Ҡыш етте.

Ҡыш етте. Ер өҫтө ап-аҡ ҡар менән ҡапланды. Бәҫ ҡунған ағастар шул тиклем матур! Тын ғына мамыҡ ҡар яуа. Тирә яҡта шундай тынлыҡ, әйтерһең дә тәбиғәт кешеләрҙе үҙе менән бергә ял итергә саҡыра.(34 һүҙ.)

*(Әйҙәгеҙ инша яҙайыҡ... Методик ҡулланма. Л. А. Ғайсина. 2010. 20-се бит.)*

**3-сө сирек.**

Контроль диктант

Ҡайын.

Ҡайын өс йөҙ йыл йәшәй ала. Ләкин уларҙың йөҙ йыл йәшәгәне лә һирәк. Ҡайындарҙы бәшмәк ауырыуҙары ҡаҡшата, улар уны эстән кимерә. Ҡайын һыуын яратыусылар ҙа уның ҡороуына булышлыҡ итә. Балта менән сабылған ҡайындар ҙа йыш осрай. Ҡайын һыуы, бөрөһө, йәш япраҡтары ла шифалы. Бөрө йыйыу ағасҡа зыян килтермәй. (48 һүҙ)

*(Башкортостан укытыусыhы 4/2009, 23-сө бит.)*

**4-се сирек.**

Инша

 Яратҡан йыл миҙгелем..

Минең яратҡан йыл миҙгелем - яҙ. Был миҙгелдең айҙары – март, апрель, май. Яҙ яҡынлашыуын беҙ көндәрйылыныуҙан, ҡар иреүҙән, билдәләйбеҙ.

Яҙ көнө 8 март,1,9 май байрамдары үткәрелә. Был миҙгел иң йылы,күңелле, матур. Тирә-яҡ йәшел, яҡты төҫтә була.

Ҡоштар донъяһында ла үҙгәрештәр күренә. Ҡоштарҙы яҙ хәбәрселәре тип атайҙар, сөнки улар беҙгә яҙ ҡайталар. Ҡоштарҙың килеүе март, апрель, май айҙарына һуҙыла. Иң тәүҙә, ҡара ҡарғалар, шунан сыйырсыҡтар, һабан турғайҙар, ҡарлуғастар, һандуғастар килеп етә.

*(Әйҙәгеҙ инша яҙайыҡ... Методик ҡулланма. Л. А. Ғайсина. 2010.)*

Контроль диктант

Йәй.

Йәмле йәй етте. Киң болондар сәскәгә күмелде. Туғайҙарҙа, болондарҙа бал еҫе аңҡый. Ошо хозурлыҡ эсендә бәләкәй йылға аға.

Йәй ҡойма ямғырҙар була. Ялан һәм туғайҙарҙа йәшел үлән үҫә. Иртәнән кискәсә шат ҡоштар сутылдаша. Ҡоштар зарарлы ҡорт һәм бөжәктәрҙе ояларына ташый. Көн оҙон, йылы. (34 һүҙ)

*(Башкортостан укытыусыhы 4/2009, 23-сө бит.)*